■ Хәҙрәт вәғәзе

# ҺҮҘ ҺӨЙЛӘҮ — ҮҘЕ ҘУР СӘНҒӘТ



**Хитапнамә - һөйләм сәнғәте, һүҙ күрке**

Вәғәз - өгөтләп, димләп, өндәп һөйләнгән һүҙ - ул сәнғәттең бер төрө, бөтә сәнғәттәрҙе лә үҙенә берләштергән бер шөғөлдөр. Һис бер һөнәр эйәһе был донъяға һөнәренең остазы булып тыумаған. Үҙен әкренләп етештергән, һәләт ҡеүәтен үҫтергән һәм сәнғәт оҫтаһы булған.

Хатип йәки вәғәз һөйләүсе лә шулайҙыр. Кеше вәғәз һөйләүсе булып тыумай. Һөйләй-һөйләй, аңлата-аңлата, тыңлай-тыңлай хатиплыҡ сәнғәтенә ирешә. Был бик нескә бер һөнәрҙер. Был һөнәргә өйрәнеүҙең үҙ ысулы барҙыр. Төрлө һөйләм ысулдары барҙыр: мәҫәлән, бер төрлөһө кешене фетнә-насарлыҡҡа йүнәлтә йәки фекер аңлашылмаусылығы тыуҙыра. Бер төрлөһө әҙәм балаһының йөрәгенә дәрт, ҡеүәт биреп, тоғро йәшәргә илһамландыра.

Һүҙҙең ҡайҙа, ҡасан һәм ниндәй ерҙә һөйләнеүе лә мөһим фислегенә эйә булыу - еңел эш түгел. Төрлө өйрәнеү-өйрәтеү, уҡыу-уҡытыу, һөйләү һәм тыңлау метод-ысулдарын файҙаланып, был сәнғәткә ирешеү мөмкин.

Үҙегеҙгә мәғлүм: белгән кеше өсөн белмәгән кешене тыңлап тороу шул тиклем ауыр йөк булыр. Нәҡ насар бер шофер янында ултырып барған һәләтле, оҫта бер шофер һымаҡ булалыр был.

Эйе, ғалимдарыбыҙ: “Тел күрке - һүҙ”, - тигәндәр.

Боҙоҡ тел менән ижекләп, йәмһеҙ уҡылған хөтбә-вәғәзде күҙ алдына килтерегеҙ… Ни ҡәҙәр ауырһынып үткән бер ваҡыттыр был.

Мәғлүмдер, хәҙер мәсеттәребеҙҙә башланғыс синыф балаларынан алып университет талиптарына, уҡытыусыларына ҡәҙәр күп ҡатламлы, төрлө ҡарашлы йәмәғәт пәйҙә булды. Тәжрибәле, киң даирәле фекер йөрөтөүсе һәм дә тирә-яғын яңы ғына таный башлаған кешеләр ҙә бар. Был хәлдә, хатип-вәғәзсенең урталыҡты тотоп, һәм дә йәмәғәткә аңлайышлы һөйләүе еңел бер эш түгел. Бында хистәр түгел, ғилем һөйләшер, бында уҡыу түгел, аңлата белеү кәрәктер. Сифатлы итеп дәрәжәле шәхестең аңлатыуы кәрәктер.

Ислам дине таралған дәүерҙәрҙә үк хатиптар етештергән махсус мәктәптәр булған. Унда белем алғандар Аятел-Көрсигә таянып, мөнбәргә сығып хөтбә уҡығандар. Был һөнәрҙе үҙләштергән хатиптар иң башта халыҡтың психологияһын, ғөреф-ғәҙәттәрен, милли нескәлектәрен, рухи ҡараштарын, тел, тарих үҙенсәлектәрен күҙ уңынан үткәргәндәр. Дини һүҙ оҫталары халыҡты ҡыҙҙырыу, ярһытыу менән түгел - ғилем менән, нәфрәтләндереү менән түгел - һөйөү менән берләштергәндәр, тәрбиәләгәндәр. Хөтбәне тоғро файҙаланғандар, халыҡты арытмайынса һөйләгәндәр, тыңлап ултырыусыларҙы йәлеп итә белгәндәр.

Улар хөтбәләрҙең солтаны, хәҙрәти пәйғәмбәребеҙҙән үрнәк алғандар.

Шуға ла вәғәздәр иләһи, әҙәпле әҙиптәр теле менән әҙәби телдә һөйләнергә тейешле.

Кешенең хисен түбәнһетмәйенсә, күңеленә ҡаты бәрелмәйенсә, татлы һүҙ, көләс йөҙ менән, тойғо төшөнсә-ләренә илһам биреү урыны - ул мөнбәрҙер.

Бының тәртәһенән сыҡһа, вәғәздең файҙаһынан күберәк зарары булыр.

Ҡайһы бер вәғәздән һуң ҡолаҡтан ҡолаҡҡа: “Тип әйткән икән”, “Тип ҡуйған икән” кеүек һүҙҙәр ҙә әйтеләләр. Бындай фетнәләрҙең сығыуына сәбәп бирмәҫкә кәрәктер. Инде аҡырып-баҡырып һүҙ әйтеүе арҡаһында уңайһыҙлыкта ҡалған кешеләр дини хис менән һөйә алмаҫтар. Кешеләрҙе ҡара-ҡаршы ҡуйыу, хур итеү ысулы менән йәмғиәтте һис бер нәмәгә өйрәтеп, тәрбиәләп булмаҫ.

Мөнбәр оҫталарының хөтбәләре әҙәпле, үлсәмле һәм тәҫирле булып, нәҡ пәйғәмбәребеҙ кеүек, милләтте берләштергән һәм ғәскәр иткән тәьҫирҙең ҡеүәтенә тиң күркәмдер. Мөнбәрҙә хөтбә уҡып, вәғәз һөйләп тә йәмәғәт менән ғауға сығарған хатипты кем һөйөр? Һөйөлмәгән шәхес - шул уҡ заманда тыңланмаған шәхестер. Кешеләр һөйләгәндәрен тыңларҙар, һөймәгәндәренән ҡасырҙар. Хатиптың вазифаһы - йәмәғәтте туплауҙыр. Тимәк, был вазифа - бик нескә фекерләүҙе талап иткән вазифалыр.

Имам-хатип вазифаһы ул - зирәк зиһен, алдан күрә белеүгә эйә булған, урталыҡта булыу кәрәклегенә инанған мөҡәддәс бер хеҙмәттер. Был хеҙмәттә уңышҡа ирешеүҙең серҙәре нимәлә һуң? Уңыштың сере бер генә - һөйөү. Йәмәғәтте һөйһәң, хеҙмәтеңде һөйәсәкһең. Был һөйөү менән нәзәкәтле булаçаҡһың, был һөйөү менән халҡыңды аңлаясаҡһың, төшөнәсәкһең, был һөйөү менән маҡсаттарыңа ирешәсәкһең.

Йәмәғәттең ҡәҙерен белеү, кәйефен боҙмау өсөн итәғәт итәйек.

Пәйғәмбәребеҙҙең, ғәләйһис-сәләм: “Турһайған йөҙ менән намаҙҙа тормағыҙ”, - тип бойорған нәсихәтендә күп нәмәләрҙең хикмәте тулыһынса аңлашыла.

Мөнбәр остазы булыу өсөн ғәйрәт итәйек!

Йәмәғәтте дини инаныҫҡа ҡауыштырайыҡ!

Һөйәйек һәм һөйөләйек, дингә өйрәтеү юлдары һөйөү арҡылы булғанын беләйек!

**Мөхәммәт ҒӘЛЛӘМ**
***“Әхлаҡ гүзәллектәре”***

# САБЫЙҘАРҘЫ ҠЫУАНДЫРАЛАР

**Г. ВАЛИДОВА**

Ата-әсәнең вазифаһы бала тыуҙырыу ғына түгел, ә баланы сәләмәт итеп үҫтереү, яҡшы, күркәм тәрбиәләү, дине, милләте өсөн файҙалы итеү - ата-әсәнең вазифаһы. Пәйғәмбәребеҙ хәҙисендә әйткән: “Балаларығыҙҙы яҡшы итеп тәрбиәләгеҙ”. Һөйөклө пәйғәмбәреҙҙең балаларға ҡарата мөғәмәләһе, мөхәббәте, сабырлығы беҙҙең өсөн үрнәк булып тора.

Балаларға хаҡ динебез ислам нигеҙҙәрен өйрәтеү, әҙәп-тәртипкә күндереү маҡсатында йыл һайын Сибай ҡалаһының “Тәҡүә” мәсетендә Әғләметдин хаҗи-хәҙрәт етәкселегендә балалар өсөн ислам лагеры үтеп килә, әлхәмдүлилләһ.

Эскелек, фәхишәлек, үҙ-үҙеңде һәм кеше үлтереү, урлашыу, алдашыу сәскә атҡанда, был бәлә-афәттәрҙән фәҡәт ислам дине, күңелдәге иман, йәғни Аллаһы Тәғәләгә ышаныу, Уны яратыу, Унан ҡурҡыу ғына ҡотҡарасаҡ.

“Аҙ ғына булһа ла балаларыбыҙҙы әҙәп-тәртипкә күндерә алғанбыҙ икән, был бик шатлыҡлы, сауаплы эштер”, ти хәҙрәт. Ысынлапта, пәйғәмбәребеҙ үҙ хәҙисендә әйткән: “Кеше үлгәс, 3 төрлө ғәмәленән тыш, бөтә эштәре туҡталып ҡала: биргән саҙаҡаһының сауабы, ҡалдырған файҙалы белеме һәм ата әсәһе өсөн доға ҡылыусы изге балаһы” (сәлих Бухара).

Лагерь беренсе тапҡыр 1994 йылда үткәрелә башлана һәм йыл һайын йөҙҙән ашыу бала ҡатнаша. Лагерҙың офоҡтары ла киңәйә бара. Себер яҡтарынан, Силәбе өлкәһенән, Бәләбәй ҡалаһынан һәм тирә-яҡ райондарҙан балалар күпләп килә.

Лагерҙы “Тәҡүә” мәсетенең мөғәлимәһе Ноғманова Әминә абыстай төҙөгән программа менән үткәреп киләләр. Программа ябай һәм шул - уҡ ваҡытта төп фәндәрҙе (ғәҡидә, әхләҡ, фиҡһ, тарих) үҙ эсенә алған. Уҡытыуҙан тыш төрлө конкурстар, экскурсиялар, сценарийҙар, уйындар ҙа ҡаралған.

Лагерь сәғәт иртәнге 11-ҙән киске 6-ға тиклем булып, төшкө һәм киске аш индерелгән. Балаларҙы быйыл Өфө ҡалаһының М.Солтанова мәҙрәсәһенән һәм Рәсәй Ислам Университетынан практикаға ебәрелгән шәкерт егеттәр һәм ханымдар уҡытты.

Лагерға 4-5 йыл рәттән йөрөүсе балаларҙың әйтеүенсә, быйылғы лагерь бигерәк тә ҡыҙыҡлы, фәһемле, күңелле үткән, сөнки балалар янында “шайтан” образы ла килеп сыҡҡан. “Шайтан һәр ваҡыт беҙҙең янда (ашап эскәндә, йоҡлағанда, бәҙрәфтә һ.б.), насар, харам ғәмәлдәр ҡылырға ҡоротоп йөрөй. Быны балаларҙы алдап, йәшерергә ярамай. Кем шайтан ҡотҡоһона бирелмәй, намаҙ, Ҡөрьән уҡып, насар эштәрҙән, гонаһтарҙан тыйылһа, ул кеше шайтанын еңә”, ти Әминә абыстай.

Лагерь тамамланыу тантанаһына Өфөнән килгән ҡунаҡтарҙың Башҡортостан Диниә назаратының уҡытыу буйынса мөфтей урынбаçары Руслан хәзрәт Саяховтың, Диниә назаратында йәштәр бүлеге рәисе Айнур хәҙрәт Арыçлановтың, шәйх Хөсәйендең, Сибай ҡала администрация етәксеһенең урынбаçары И.Р.Хайруллиндың килеүе, ата-әсәләрҙең саҡырылыуы ла байрамға мәртәбә өҫтөнө.

Тантанала лагерь барышында үҙен бөтә яҡтан да әҙәпле, тәртипле күрһәткән балаларға ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды.

Лагерҙың һуңғы, йәғни, йома көн балалар асфальтҡа ирекле темаға һүрәт төшөрҙөләр.

Ошондай изге, сауаплы, ауыр эште нисә йыл атҡарып килеүсе Сибай “Тәҡүә” мәсетенең имам-хатибы Әғләметдин хәҙрәткә, Әминә һәм Зөһрә абыстайҙарға, Заһир остазға, ашнаҡсы Гөлсөм ханымға, Тахия хажиға, практика үтеүсе М.Солтанова исемендәге мәҙрәсә (етәксеһе И. Малаховҡа) һәм РИУ шәкерттәренә ата-әсәләр исеменән рәхмәт белдерәбеҙ. Уларға иман ныҡлығы, һаулыҡ, эштәрендә һәм уҡыуҙарында уңыштар, ғәилә именлеге, Аллаһы Тәғәлә сауаптарын насип итеүен теләйбеҙ.

# ОЖМАХ
## ТУРАҺЫНДА УЙҘАРЫМ

**Нурания МУЛЛАЯНОВА,**
**14 йәш, Бөрйән районы,**
**Байназар ауылы**

Ете ҡат хозури ҡапҡа. Һәр бер ишектең нур менән язылған исемдәре Фирҙәүес, Райхан, Нәғим… Уйҙарымда шул ҡапҡаларҙың берәүһен асам. Ҡапҡаларына етмәҫтән элек үк хуш еҫтәрен тойғандай булам. Йәғни шундай рәхәт, күңелгә ләззәт. Аяҡтарым атламай әкретен генә осоп барам - юлдарымда бәхетле йөҙҙәр, көлгән тауыштар, ағымлы һүҙҙәр генә оҙата бара. Тирә - йүнгә күҙ һалам: бөтә ерҙә сафлыҡ, йәшеллек, хозурлыҡ. Ҡоштарҙың һайрауы, иҫәпһеҙ күҙҙең яуын алып торған бәрхәт сәскәләр йөрәккә тағы ла нығыраҡ йылылыҡ өҫтәй. Йылғалары һөттәй ап-аҡ, шәкәрле, емеш-еләктәре балдай татлы, ауыҙҙа эреп тора… Ә йорттары ниндәй һуң! Бейек-бейек, аҡтан, алтындан. Кешеләрҙә бер ниндәй көнләшеү, мәкерлек юҡ. Йөҙҙәре сибәр, йәштәр, телдәрендә тик мөләйем һүҙҙәр. Кемдер арыçланға атланған, кемдер ҡуяндар менән ҡыуыша, ә өсөнсөләре ҙур балыҡтар өҫтөндә.

Әкренләп уйҙарымдан айнып ысынбарлыҡҡа ҡайтам. Был донья шундай ҡараңғы, күңелһеҙ булып ҡала. Эй, Раббым һиңә ялбырам, насип ит инде беҙгә ожмахҡа керергә!